*Рәмил ЙӘНБӘК*

# ВАҠЫТ ТОЛПАРЫ

**Поэма**



Кем әйтмешләй, йорттар көлөп тора,
Йылмаялар баҡса, урамдар.
Машиналар, хатта, йырлап уҙа, —
Ни ғәләмәт һуң был, туғандар?

Төрлө төҫтә ем-ем иткән уттар
Күскән әллә күктең түренә;
Аймы шундай сағыу, әллә ҡояш
Ҡуна ҡалған бөгөн үҙе лә?

Һабантуйҙағылай, төркөм-төркөм
Майҙандарға халыҡ эркелә.
Әкрен иҫкән эңер еле менән
Тантаналы нурҙар бөркөлә.

Һин электән сибәр инең, Өфөм,
Бөгөн үҙеңде лә уҙғанһың.
Донъя күҙе бөгөн һиңә төшкән,
Һин донъяға ҡолас һуҙғанһың.

Уттай эш мәлендә ул ни тигән
Былдай шаулы, оло тантана?
Төп геройым мине ашыҡтыра,
Уның монологы башлана.

## Ҡурайсы Азамат

Автор ҡуйған һорау, уҡыусыбыҙ,
Һис сер түгел һиңә, миңә лә.
Уға яуап бөтәбеҙгә яҡын,
Беләләрҙер һәммә илдә лә.

Юрый ғына автор һаташтыра,
Сер яһарға оҫта шағирҙар.
Ҡыуаныска шатлыҡ өҫтәр улар,
Кәрәктә йылы һүҙ табырҙар.

450...Ошо һан эсенә
Һыйған күпме ғүмер, яҙмыштар;
Ҡаһарманлыҡ — һатлыҡ,
ҡайғы — шатлыҡ,
Һөйөү — нәфрәт,
балҡыш — һағыштар.

Дүрт быуат та йәнә ярты быуат
Бәйләгәнгә бергә яҙмышты.
Байрамда ла миңә тынғы бирмәй:
Хаҡмы был эш, әллә яңылышмы?

Яңылышмаған микән бабаларым
Урыҫ батшаһына баш һалып?
Халыҡ ихтыяры булғанмы был,
Әллә өҫтөн сыҡҡан ҡашҡалыҡ?

...Эсемдәге уйҙар эстә ҡалыр —
Тантананы боҙмаҫ, моғайын.
Тынып торһон бер аҙ ҡурайым:
Ваҡыт арғымағын ауыҙлыҡлап
Үткәндәргә барып урайым.



Ай көн ине, көн ине,
Салттан да салт көн ине.
Ерҙең өҫтө — ожмахтай,
Төштәгеләр өн ине.

Халыҡтарҙы күктәргә
Йыйынға саҡырҙылар.
Бөгөн фатир бүлгәндәй,
Асҡыстар тапшырҙылар.

Һәр халыҡҡа был асҡыс —
Торор ере тамғаһы.
Алланан бурыс төштө,
Үҙ хәстәрең — ҡалғаны.
Тирен һөртөп, хушланып,
Үтеп етенсе ҡатҡа,
Хәл алырға Илаһи Аллаһ
Түшәк-болотҡа ятҡан.

Серем аша ҡолағым
Бер уфтаныу ишетә:
Фәрештәләр ник үткәргән,
Кем тора һуң ишектә?

— Илаһым! — ти был бәндәһе,
Ярлыҡай күр, үтенәм.
Ҡунаҡ килеп, һуңға ҡалдым.
Был хатама үкенәм.

Халыҡтарға өләшкәнһең
Аҫыл-аҫыл ерҙәрҙе.
Башҡортоңа ла шуларҙан
Өлөш сығар берәрҙе.

Уйға ҡалды Аллабыҙ.
Уның хәлен аңлағыҙ:
Үҙе бар ҡылған балаһын
Ҡалдырһынмы ҡалъяһыҙ?

— Хуш, — тине Аллаһ, көрһөнөп,
Йыйнаны ла уйҙарын. —
Үҙемә тип һаҡлағайным,
Бирәм Урал буйҙарын.

Ер өҫтөнөң шундай ожмахында
Ғүмер иткән башҡорт борондан.
Әммә тормош гел һәйбәткә түгел,
Яман, мәкергә лә ҡоралған.

Ул көнләшеү тигән түбән сифат
Ана шул заманда тыуғандыр,
Көс һөслəтеп, бәндә баштарын да,
Тотош ҡәүем йәнен ҡыйғандыр.
Ибн-Фаҙлан атлы Бағдад
хәлифенең
Яҙмаһына ингән сағында
Күп һынауҙар үткән булған
халҡым.
Алда — яңылары тағын да.

Уғыҙ, бәшәнәктәр, ҡыпсаҡ менән
Быуат-быуат йәшәп йәнәшә,
Яу ҡайтарған башҡорт,
ерен һаҡлап,
Туғанлашҡан һәм дә ҡан аша.

Алтын Урҙа берҙәй суҡмар
булған
Урыҫҡа ла башҡорт, болғарға.
Шул ваҡыттан — уртаҡ яуҙар,
дауҙар,
Уртаҡ яҙмыш насип уларға.



Ҡазан ханы менән Себер ханы,
Ҡәһәр төшкөр яуыз нуғайҙар,
Ҡара ҡарғаларҙай, көпә-көндөҙ
Мал-мөлкәтте талай, урлайҙар.

Баш бирмәгән башҡорт батырҙары
Дарға ҡабырғанан аҫыла.
Балалары, һылыу ҡатындары,
Ҡол ителеп, ҡырға һатыла.

Ил буйлатып иңрәү осоп йөрөй,
Хәсрәт ингән йәйләү, ҡышлауға:
«Күпме иҙер тағы илбаҫарҙар,
Күпме тир түгергә бушлайға...»

Шомло дәүеренә сал тарихтың
Ваҡыт толпарында уҡталам.
Сәләм бирә-бирә үткәндәргә,

Бейҙәр йыйынында туҡталам.
Тарих тәгәрмәсен бороп булмай,
Булған хәлдәр инде булғандар.
Тыңлап ҡына ситтә ултырырға
Рөхсәт бирҙе йыраҡ туғандар.

## Йыйын

— Уҙамандар, — тиеп һүҙ
башланы
Үҫәргәндәр башы Бикбау бей, —
Хәҙрәтебеҙ ҡылды изге доға,
Бағышланы ҡорға йырау көй.

Ил-йорттарҙың китте тыныслығы,
Хәүефле шом баҫты донъяны.
Шундай мәлдә дүрт ырыуҙан бөгөн
Кәңәш йыйнарға тип уйланыҡ.

Төркиәнән хәбәр йөрөп тора,
Имеш-мимеш гәрсә күптәре.
Ҡайҙа баш һалырға,
аҡһаҡалдар?
Ҡанат-ярҙамдарһыҙ миктәнек.
Бөрйән ырыуынан Иҫке бейҙе
Ихтирамлай илдә һәммәһе.
Алғы юлыбыҙҙы юллар ҡорҙо
Аҡыллы һүҙ менән йәмләһен.

— Һүҙ ҡатырға миңә
иртәрәктер, —
Хәйләкәр бей ҡыҫа күҙҙәрен.
— Тыңлайһы бар илдең ағаларын,
Тамъян менән ҡыпсаҡ һүҙҙәрен.

Өс йыл инде Ҡазан
ҡыйралғанға,
Ул яҡтарға өмөт самалы.
Хәле мөшкөл нуғай,
Әстрәхандың —
Бөтә яҡлап урыҫ ҡаманы.

— Һин, кем, хөрмәтле бей,
— Шәғәле Шаҡман
Тамаҡ ҡырҙы, ҡымыҙ уртланы. —
Ҡыҙып китеп, урыҫ тарафтарын
Улай уҡ та өҙә һуҡмәле.

Ышаныслым ошо араларҙа
Урап ҡайтты йыраҡ даланан.
Ҡеүәтләнгән, тиҙәр, Мәскәү иле,
Үҙен таный швед, алмандар.

Урыҫҡа йөҙ тотоу хәйерлерәк,
Арабыҙ бит, шөкөр, аҡ, сыуаҡ.
Грамот менән Ҡазан ҡалаһынан
Ҡайтҡан Ғәйнә башы Айсыуаҡ.

Нуғайҙарға ҡаршы яуҙар сабып
Дан яулаған хан-бей Ҡәнзәфәр
Меңдәр исеменән, башын эйеп,
Аҡ батшаға ҡылған, ти, сәфәр.

Күгиҙелдән көндөң сығышына
Йәйрәп ята бер ил — Юрматы.
Уның бейе Тәтегәс тә, ана,
Мәскәү тарафына юл тапты.

— Беҙ, ҡыпсаҡтар,
— Мешәүәли бей ҙә
Әңгәмәгә китте ҡатышып, —
Уйҙы күптән инде төйнәгәнбеҙ:
Иван батша иң-иң ятышлы.

Оло Иҙел буйын баҫҡанда ла,
Ҡоторһа ла Ҡазан ерендә,
Башҡортҡа бит ҡорал күтәрмәне,
Яуыз һүҙ булманы телендә.

Бына әле тағы хат ебәргән,
Әйҙәп яҙған беҙҙе үҙенә.
Бәхәстәрҙе ситкә ҡуйып тороп,
Ҡолаҡ һалайыҡсы һүҙенә:

«Тарҡау йәшәйһегеҙ, —
тигән Иван, —
Беҙ ҙә, Московия, тарҡаубыҙ.
Илде нығытырға ҡеүәт аҙмы,
Әллә инде үҙебеҙ ялҡаубыҙ?

Бер сыбыҡты бөгөү бер ни түгел,
Оло миндек һынмай, бөгөлмәй.
Тиңдәр араһында тиңдәр булып
Ҡушылығыҙ беҙгә бөгөндән.

Йорт-илегеҙ йәшәр әүәлгесә,
Динегеҙгә һис кем ҡағылмаҫ.
Бергә-бергә булһаҡ,
һеҙҙәргә лә,
Беҙҙәргә лә дошман яғынмаҫ.

Килешеү яҙып, яһаҡ түләрһегеҙ,
Миңә түгел, уртаҡ ҡаҙнаға.
Үҙегеҙсә — ғөрөф-ғәҙәтегеҙ,
Оронмабыҙ һеҙҙең яҙмаға.

Уртаҡ булыр Рәсәй сиген һаҡлау,
Яу сабыуҙар — дошман янаһа.
Һәр нәмәне бергә хәл итербеҙ,
Ығы-зығы сыҡмаç арала».

Мешәүәли Ҡарағужаҡ йәнә
Оло бер һүҙ әйтте ирҙәргә:
— Ҡабул ҡылһаҡ батша
ихтыярын,
Аçабалыҡ бирә ерҙәргә.

— Алдай, — тинем шул саҡ,
түҙмәйенсә,
Ҡайҙа ултырғанды онотоп. -
Халҡыбыҙҙы ҡан илатты Рәсәй,
Еребеҙҙе бөттө ул йотоп.

Өндәшмәне бейҙәр, аҡһаҡалдар,
Башын күтәрмәне ҡалғандар.
Күңелем менән унда йөрөһәм дә,
Һүҙ әйткәнмен беҙҙең замандан.
Оҙон бер хат яҙып, бүләк тейәп,
Вәкилдәрҙең Ҡазан тартыуы
55-тең һуңындамы булды,
Әллә башы 56-ның.



Башты эйеп йәшәү тейешлелер —
Беләләр бит ҡылыс сапмаçын?!

...Күтәрелгән башҡорт, күтәрелгән:
Рәсәй батшалары алдағас;
Ҡәлғә төҙөп, һалып заводтарын
Аçабалыҡ ерен ҡамағас;
Көн-төн йөрөп батша хеҙмәтендә,
Бер тин жалуанья алмағас;
Йорт-мөлкәтен, аслан бинахаҡка,
Драгун төрткән уттар ялмағас;
Мәсет төҙөүҙәрҙе тыйып ҡуйып,
Көсләп суҡындыра башлағас;
Иркен болондарҙы, киң ҡырҙарҙы
Баяр имениеһы ҡаплағас;
Һалым йыйыу һылтауҙары менән
Мөлкәт, мал, солоҡтар таланғас;
Түҙер әмәлдәре ҡалмағас —
Сыҡҡан яуға башҡорт, күтәрелгән...
Баш эйәмен алыç бабамдарҙың
Батырлығы, рухы алдында.
Тик, әлеңгә, уйым бүтән ине,
Әле һүҙем башҡа хаҡында:

— Батша талабына ҡаршы
сыҡмай,
Түҙһә улар ҡыçып тештәрен,
Халыҡ шундай ҡырылмаç та ине,
Бүтән китер ине эштәре?
Беҙҙе генә тишек шөмәндәргә
Ултырттымы урыç батшаһы...
Күтәрелеп сыҡһа татар, мишәр,
Сыуаш, сирмеш, мари, башҡаһы?..

## Рухтарҙы саҡырыу

Быуаттарҙан-быуаттарға елеп,
Ваҡыт толпарым да арыны.
Яуап эҙләп һанһыҙ һорауҙарға
Яңы һорауҙарға тарыным:

— Шундайын да ҙур ышаныс
менән,
Байраҡ итеп алып өмөттө,
Аҡ батшаға баш һалғайны
башҡорт
Бәхет кошон кем һуң өркөттө?

Төрлө яҡҡа төбәп ҡараштарҙы,
Күңел тартҡас Мәскәү тарафын,

* * *

Ҡурайымды алдым ҡулыма,
Сумды моңға — һағыш моңона.
Ҡурай иңрәп, ҡурай һырҡырап
Батырҙарҙың рухын саҡыра.

Һары Мәргән рухы:
— Нисәмә йөҙ йылдар тыныс
яттым,
Әй, кем унда рухым ҡуҙғата?
Һүҙ тотмаған батшаларға ҡаршы
Яу сабыуым хаҡтыр унлата.
Мин — һуғышсы. Беләм тоғро
һүҙҙең
Ҡылыстан да үткер булғанын.
Алдап мыçҡыллаﾈыу — шул күтәрҙе
Изге яуға башҡорт уланын.

Халҡы иңрәгәндә боҫоп ятыу —
Ысын ирҙең түгел үнәре.
Ғәҙеллекте яҡлап, ерҙе һаҡлап
Беҙ ҡаныбыҙ менән түләнек.
Яуға башлап өмөтөбөҙ барҙы,
Ул — тамғаһы ғәскәр тыуының.
Борғоланды Мәскәү, ныҡ татығас
Ҡатылығын башҡорт ҡулының.

Төрлө яҡҡа сапҡын йөрөп торҙо,
Ажғыр арыҫландай туланыҡ.
Себер ханы ине үҙе көсһөҙ,
Ҡалмыҡтан да ярҙам булманы.

Шәһит үттем — ерем иркенлеге,
Илем ireклеге хаҡына...
Кем, Азамат балам, нәҙер тапшыр
Һинең замандағы халҡыма.

Сәйет батыр рухы:
— Солоҡтар за бөттө.
Һыуҙан ҡаса балыҡ.
Ҡайҙа бабаларҙан ҡалған аҫабалыҡ?

Йәберләүе етмәгәйне ҡара
халыҡты, тим,
Был кафырҙар динебеҙгә
ҡаныҡты бит.

Суҡынғансы урыҫтарҙың тәреһенә,
Изге яуҙа ҡайтарырмын кәрем, кенә.

Туҙҙырҙыҡ ул динһеҙҙәрҙең
донъяларын,
Үрткә тыҡтыҡ сиркәү, ҡәлғә
ҡорғандарын.

Ләксәй батша малайҙары —
хөсөт, алдай.
Ышанды бит шул алдаҡҡа
Көсөк Юлай.

Күп ерҙәрҙә ғәскәрҙәрҙе
томаланыҡ,
Өфө һынлы Өфөнө лә беҙ
ҡаманыҡ.

Ҡалмыҡтарҙан ғәскәр көттөк ошо
көҙҙө —
Тик дуҫлыҡты хәйлә менән
мәкер өҙҙө.

Хаҡ мосолман — йән, йөрәгем.
Рухым таҙа.
Тәүбә итмәм ҡылғаныма.
Һеҙгә яҙам,
Әй бүләләр, нисәмә йөҙ йылдар аша:
Һеҙ бар икән! Шатлыҡ берлән
һаубуллашам.

Азамат ҡурайсы:
— Олуғ шәхестәрҙең рухтарына
Ҡөрьән сығып, доға ҡылайыҡ.
Шәһиттәрҙең һәммәһе лә ғәзиз —
Иҫкә алып, бер аҙ тынайыҡ:

Дөмәй Ишекәйев, Иман батыр,
йәнә
Ураҡай ҙа менән Алдарҙар...
Башҡорт йәшәгәндә онотолмаҫ,
Изге маяҡ булып янырҙар.

Ҡараһаҡал, мәшһүр Батыршаның
Исемдәре йөрәк түрендә.
Ҡылғандары хәтер күгебеҙҙә, —
Тыныс ятһын улар гүрендә.

Ҡаршылыҡлы уйҙар солғай мине,
Иҫкә төшһә Бүгәс болаһы.
Былдай болғанышҡа, өмөт бағлап,
Ник ҡушылған башҡорт балаһы?

Белгәндәр бит: Бүгәс — батша түгел,
Ябай бер каторжан икәнде,
Яйыҡ казактары, байраҡ сөйөп,
Үҙҙәренә ҡалҡан иткәнде.

Онотҡанмы улар Тәфтиләүҙе,
Карателдәр иҙеп уҙғанды?
Ҡол ителгән бала, ҡатын-ҡыҙҙы,
Нисәмә йорт, ырыу туҙғанды?..

Кинйә абыҙ рухы:
- Киләсәктән шундай һүҙ килерен
Көтә инем.
Әйтәм ихластан.
Ҡылғандарҙы уйлап күп һыҙландым,
Зар иланым мин дә сит яҡта.

Олпатланған ил ағаһы инем
Уй төйнәгән саҡта ул ваҡыт.
Күп миктәтте илде Комиссия*,
Ҡанды эсте яуыз алпауыт.

*Ырымбур экспедицияһы

Ырыуыма түгел, улысыма
Мал йәйләрҙәй урын ҡалманы.
Хөкүмәт һуң — тоҙға,
балыҡҡа ла —
Ниндәй генә һалым һалманы.
Ырымбурҙың нигеҙе
таштанмы ни —
Һөйәктәре тота ҡыпсаҡтың.
Шунын өсөн, старшина көйө,
Ҡайрап торҙоҡ һәр саҡ бысаҡты.

Юлай ҡорҙаш менән, батша яҡлап,
Күп йөрөнөк поход, яуҙарҙа.
Түшкә ҡалай тағып маһайҙыҡ та
Шәп һаналдыҡ — илгә дау барҙа.

Башҡа һала барҙыҡ: Батша ғына
Илен яһай ала гөл-баҡса.
Ҡара халыҡ яҡлар шәхес күрҙек,
Яҡшы батша күрҙек Пугачта.

Юлай Аҙналин рухы:
— Аҡыл тулы гелән абыҙ һүҙе,
Ул асылын әйтте һинә лә.
Беҙҙең заманда бит абыҙ әйткән
Көрьән һүҙе менән тиңәлә.

Петр ғали йәнәптәре хат ебәргәс,
Таныным мин Кинйә тамғаһын.
Өмөт — ҡыҫыр. Әммә яуға
ҡалҡтым.
Һеҙгә анык инде ҡалғаны.

Ғәйебем ҙур: йәндә ышанысым,
Тәндә рухым ныҡлыҡ тойманы.
Кинйә абыҙҙы ник туҡтатманым,
Салауатты нинә тыйманым?!

Салауат Юлаев рухы:
— Өҙгөләнмә, атай!
Йәш булһам да,
Дөрөҫ бүлдем хаҡты, ялғанды.
Әйткәндәрең минең сирек быуат
Уйлап сыҡҡан уйға ялғанды.

Һинә генә, ололоғоң йәлләп,
Һөйләп барманым шул эстәген.
Ташҡа һалдым уйҙар ауырлығын,
Икеләтә шуға эшләнем.

Фанилыҡтан китеп, рухың осҡас,
Көрьән сыҡтым, атай, үҙеңә.
Арындым мин шөбһә-шиктәремдән,
Теклэп торғас йомоҡ күҙеңә.

Йөрәк һиҙемләүе юл күрһәтһә,
Терәк булдың ошо юлымда.
Ырыуҙыҡы түгел, бар
халыҡтың
Әләме бит ине ҡулымда.

Рәхмәт, атай, күңелең
йәлләһә лә,
Барыр маҡсатымды бүлмәнең.
Киләсәкте яҡлап яғалаштыҡ,
Рухыбыҙ ҙа шуға үлмәне.

Иҙел ярындағы таш һынымда
Таныймын мин беҙҙең хаҡлыҡты.
Сая яуҙар, ҙур ҡорбандар аша
Бөгөнгөгә илттек халыҡты.

## Зәки Вәлиди менән әңгәмә

Бейҙәр һәм батырҙар ысҡындырҙы
Күңелдәге байтаҡ тоҙаҡты.
Ихтирамлы, изге рухтарҙы мин
"Салауат маршы"н уйнап оҙаттым.

Инде күп ҡалманы сәхнәгә лә,
Ҙур ҡунаҡтар, ана, күренде.
Әҫәрләнеп күргән-кисергәндән,
Ҡурай моңдарына күмелдем.

Вәлиди Туған рухы:
— Саҡырылмай килдем,
кисерә күр,
Ҡурай моңоң, энем, тыңланым.
Тының аша һиҙҙем йөрәгеңдә
Минең тарафтарға ым барын.

Ихлас тәбрик итәм тантананы,
Был ваҡиға лайыҡ дандарға.
Ошо мәлдә үткәндәргә ҡайтам
Һәм тырышам уны аңларға.

Азамат ҡурайсы:
— Йәнде игәр, эйе, бер һорау бар,
Берсә ҡалҡа, берсә юғала:
Тарихтағы тик бер мәлегеҙҙе,
Ҡылғанығыҙ нисек юрарға?

Оло ғалим, тарих тәфсирсеһе —
Белдегеҙ бит нимә күтәрен,

Рәсәй-илгә ҡаршы яу сабыуҙың
Нисек бөтөрен.

Вәлиди Туған рухы:
— Рәсәйгә ҡаршы сыҡманыҡ беҙ,
Большевиктар менән көрәштек.
Аҫабалыҡ ҡайтһын башҡортҡа тип,
Кешеләргә өмөт өләштек.

Азамат ҡурайсы:
— Башҡорт башҡайҙарын утҡа
тығып,
Терәлгәс тә ҡомға кәмәгеҙ,
Кинәт кенә — хамелеон төҫлө —
Ҡыҙыл булдығыҙ һеҙ, йәнәһе.

Ғәфү үтенәмен, Зәки аға,
Һеҙ — ҡәҙерле бөгөн ҡунағым.
Ғәскәр ташлап ҡасыу ауыр
мәлдә —
Ошо ир-егетлек буламы?

Вәлиди Туған рухы:
— Шәйехзада яҙған
«Көйлө хитап...» —
Тулы яуап быйндай һорауға.
Маҡсат өсөн, хәлде һиҙгәндән һуң,
Беҙ барырға булдыҡ урауҙан.

Ленин, Сталин, башҡа
большевиктар
Батшаларҙан күпкә арттырҙы:
«Ҡағыҙ киҫәге»нә әүрәтте лә
Ҡаҡ ҡалдауҙа беҙҙе ҡалдырҙы.

Ҡағыҙҙағы булһын — үҙаллылыҡ
Ул берҙән-бер ине һөҙөмтә.
Һемәйгәнде аңлап, иңрәп-һыҡтап,
Араларҙы булдым өҙөргә.

Кемдер уйлағанса, Әхмәтзәки
Яу яланын ташлап ҡасманы.
Берәү көтмәй ине сит тарафта,
Мәрхәмәттән ҡолас асманы.

Ниәт ине ярҙам ҡулы һуҙыу
Башҡортостан, башҡорт халҡына.
Ашмай ҡалған маҡсат-теләктәрҙән
Үкенестәр тора алҡымда.

Имандарым камил: беҙҙең көрәш,
Юҡ, булманы бушҡа, кәрәкһеҙ.

Әрәм тамды башҡорт ҡандары, тип
Әйтһә әйтә алыр йөрәкһеҙ.

Аҡтамырҙай ерҙә нығынғанбыҙ,
Көсәйгәнбеҙ икән, иншалла.
Разый булам, беҙҙең замандарҙан
Һеҙҙең замандарға иш ҡалһа.

Азамат ҡурайсы:
— Кисерегеҙ, Зәки ағаҡайым,
Иҫке ярағыҙҙы ҡуҙғаттым.
Рухыбыҙҙың ипкендәре менән
Шигем-һорауымды оҙаттым.

Исем-шәрифегеҙ, һүрәтегеҙ
Күптән инде байрам түрендә.
Йондоҙ булып мәңге балҡырһығыҙ
Башҡорт тарихының күгендә.

## Һуңғы һүҙ урынына

Ҡурайсы дуҫ ваҡыт толпарынан
Ырғыны ла беҙҙең заманға,
Күргән-кисергәндән шаңҡып ҡалып,
Инеп китте яҡты, ҙур залға.

...Ә мин ҡарап ҡалдым
балконымдан,
Шағирҙарҙың булмай байрамы.
Беҙгә байрам — хаҡлыҡ тантанаһы,
Беҙгә байрам — башҡорт һайрауы.

Байрам рухы, байрам ҡыуанысы
Нурға күмде Өфөм-ҡаламды.
Хисләндереп, һиҫкәндереп ерҙе
Ҡурай моңо шул саҡ таралды:
«Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын».

